Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

«Башҡорт аттары» темаһына

дәрес конспекты

(өлкән төркөм)

Әҙерләне:

Сыңғыҙова Л.Ф.

Шамонин ауылы – 2021й.

# Ете ырыу балалары.

Байрамса биҙәлгән зал.Тантаналы музыка аҫтында башҡорт кейемендә ҡыҙҙар һәм малайҙар мода күрһәтәләр һәм зал буйлап ете урынға теҙелеп торалар.

**Алып барыусы** - Хәйерле көн хөрмәтле ҡунаҡтар, балалар.

Беҙҙә йыйын, әйҙә йыйын.

Һүҙ уйнатып күңел асырға

Йырҙар йырлап, бейей - бейей

Маҡтап башҡорт биҙәген.

**Балалар шиғыр һөйләйҙәр** Ф.Ғөбәйҙуллина “Ете ырыу балалары“

**1-се бала:**

Ете ырыу балалары, ҙур байрамға килгәндәр.ынйы - мәрйен таҡҡан ҡыҙҙар, милли кейем кейгәндәр.

**2-се бала:**

Тамьян һылыуы ҡыҙҙары, кейгән матур итектәр, еләндә - тулҡынлы биҙәк, әберкәле итәктәр.

**3-сө бала:**

Үҫәргән ҡыҙы алһыу, йөрәге уның ярһыу, камзулда - һарыҡ мөгөҙө, күлдәге сағыу, алһыу.

**4-се бала:**

Табын ҡыҙҙары башында – әүернәле ашьяулыҡ, сыңрап тора ҡумыҙҙары, тыңлап таң ҡала халыҡ.

**5-се бала:**

Салауат менән Азамат, бөрйән яғынан

дуҫтар, думбырасы, ҡурайсылар, еләндәрендә - ҡусҡар.

**6-сы бала:**

Ҡыпсаҡ кейеме йондоҙло, итектәрҙә еҙ үксә.егеттәребеҙ, һай, оҫта, ҡурайҙа уйнап үҫә.

**7-се бала:**

Юрматылар кейеменең, биҙәге - осло үркәс, матур шиғырҙар һөйләйҙәр, телде яратып үҫкәс.

**8-се бала:**

Еләндәре - сағыу ҡояш, меңлеләр уйнай һорнай, тыпырлатып оҫта баҫа, һис тә оялып тормай.

## ЙЫР “ЯҘ КИЛӘ”

**Ағинәй килеп инә:**

Һаумыһығыҙ, балалар, ай - һай, йыйын йыйғанһығыҙ икән.

**Алып барыусы:**

-Эйе инәй, беҙ бөгөн башҡорттарҙың матур кейемдәрен күрергә, һоҡланырға, маҡтарға һәм маҡтанырға йыйылдыҡ.

**Ағинәй:**

-Афарин, балалар.

Башҡорт халҡының

Кейеме ҡупшы шулай

Башҡорттоң кейемен маҡтап.

Күптән доньялар шаулай. Әйҙә, ҡарайыҡ инде.

(Музыка аҫтында бөрйән ырыуы вәкилдәре килеп инә)

Ағинәй:

Илегеҙ:

Балалар:

- РӘСӘЙ! (хор менән)

Ағинәй: - Ватанығыҙ -

Балалар: - Башҡортостан!

Ағинәй: Ырыуығыҙ -

Бөрйәндәр: - бөрйән!

Ағинәй: - Ағасығыҙ -

Бөрйәндәр: - ҡарағас!

Ағинәй: - Ҡошоғоҙ -

Бөрйәндәр: - ҡарсыға!

Ағинәй: Тамғағыҙ -

Бөрйәндәр: - ҡапҡа!

Ағинәй: - Оранығыҙ -

Бөрйәндәр: - тарауыл!

Шиғыр Абдуллина Йәсмин “Яғаларым - селтәрем”

Алып барыусы -

Бейегеҙ ҙә, бейегеҙ,

Биртенмәһен билегеҙ.

Хайран ҡалһын бар халыҡ.

Оҫталарҙы күрегеҙ.

Бөрйән ҡыҙҙары бейеүе.

(музыка аҫтында юрматы ырыуы вәкилдәре)

Ағинәй: Ырыуығыҙ -

Юрматылар: - юрматы,

Ағинәй: - Тамғағыҙ -

Юрматылар :- -һәнәк!

Ағинәй: - Ҡошоғоҙ!

Юрматылар: - балапан!

Ағинәй: - Ағасығыҙ -

Юрматылар: - тирәк !

Ағинәй: - Оранығыҙ –

Юрматылар: - аҡтүбә!

(Юрматы ҡыҙҙары сәсмәүҙәрен күрһәтеп маҡтанып шиғыр һөйләйҙәр)

“Сәсмәүерем тәңкәле”

Алып барыусы6

Ниндәй матур тамаша ,

Ҡараһаң күҙ ҡамаша .

Ниндәй кейем, биҙәктәр

Ил көмөш беләҙектәр.

Килсе, һылыу, күрәйек,

Бөтәһен дә беләйек.

Йыр “Әллиләү – генәйем”

(зал уртаһына бейеп үҫәргән ырыуы вәкилдәре килеп баҫалар)

Ағинәй: - Ырыуығыҙ-

Үҫәргәндәр: - үҫәргән,

Ағинәй: - Тамғағыҙ -

Үҫәргәндәр: - ҡойошҡан!

Ағинәй: - Ҡошоғоҙ -

Үҫәргәндәр: – торна!

Ағинәй: - Ағасығыҙ -

Үҫәргәндәр: - миләш!

Ағинәй: - Оранығыҙ -

Үҫәргәндәр: – туҡһаба!

Шиғыр БИНАЗИР һөйләй “Ялтыр фирүзә таштары”

Уйын “осто, осто”

Беҙ, беҙ беҙ кемдәр?

Йыһандағы йондоҙҙар!

Беҙ, беҙ, беҙ кемдәр?

Тарихтағы батырҙар!

Беҙ, беҙ, беҙ кемдәр?

Шәжәрәле тамырҙар!

Йондоҙҙо таны, батырҙы бел,

Тамырҙы тот, табырһың ҡот

Балалар хор менән бөтәһе бергә:

- Булырһың башҡорт!!!

Ағинәй: - Һай, афарин, балалар.

Осто - осто бөркөттөр осто!

Осто - осто торналар осто!

Осто - осто дөйәләр осто!

Дөйә осhа, hеҙ бейергә бик оҫта.

Бейеү “Күбәләк “

(Зал түренә табын ырыуы вәкилдәре килеп баҫалар)

Ағинәй: - Ырыуығыҙ -

Табындар: - табындар!

Ағинәй: Тамғағыҙ –

Табындар: ҡаҙаяҡ!

Ағинәй: Ҡошоғоҙ -

Табындар: - ҡарағош!

Ағинәй: Ағасығыҙ -

Табындар: - ҡарағас!

Ағинәй: Оранығыҙ -

Табындар: - салауат!!!

Самира шиғыр hөйләй. “Сәсмәүҙәре киң таҫма ”

Йыр “Салауат”

(зал уртаhына ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре килеп сыға)

Ағинәй: Ырыуығыҙ -

Ҡыпсаҡтар: - ҡыпсаҡтар!

Ағинәй: - Тамғағыҙ -

Ҡыпсаҡтар: - тораҡ!

Ағинәй: Ҡошоғоҙ -

Ҡыпсаҡтар :- бөркөт!

Ағинәй: Ағасығыҙ -

Ҡыпсаҡтар: - ҡарама!

Ағинәй: Оранығыҙ -

Ҡыпсаҡтар: - аҡтүбә!

Шиғыр Лира һөйләй “Ике япмыс итәге”

Алып барыусы:

Балалар бейеһендәр

Кейемдәре күренһен!

Кейенеп күрһәтһендәр

Модаға өйрәтһендәр!

Йыр “Косилка - молотилка”

(зал уртаһына ҡатай ырыуы вәкилдәре килеп сыға)

Ағинәй: Ырыуығыҙ -

Ҡатайҙар: Ҡатай!

Ағинәй: Тамғағыҙ -

Ҡатайҙар: - ҡойошҡан!

Ағинәй: Ҡошоғоҙ-

Ҡатайҙар: - ҡауҙы!

Ағинәй: Ағасығыҙ -

Ҡатайҙар: - артыш!

Ағинәй: Оранығыҙ -

Ҡатайҙар: - тайлаҡ!

Шиғыр “

Алып барыусы:

Ҡара, ҡара, өарағыҙ.

Ни ҡылана балағыҙ.

Бер баҫыуҙа бишәр баҫа,

Баҫыуҙарын ҡарағыҙ

**Индира шиғыр һөйләй “Көмөш беләҙеге лә”**

**Бейеү “Күбәләк”**

**(зал уртаһына меңле ырыуы вәкилдәре килеп сыға)**

**Ағинәй:** Ырыуығыҙ -

**Меңлеләр:** - Меңле!

**Ағинәй:** Тамғағыҙ -

**Меңлеләр: -** ҡуш ҡабырға!

**Ағинәй:** Ҡошоғоҙ -

**Меңлеләр**: - ҡыйғыр!

**Ағинәй:** Ағасығыҙ -

**Меңлеләр: -** ҡайын!

**Ағинәй**: Оранығыҙ-

**Меңлеләр: -** алаҫ!

**(“Башҡортостан - гөлбостан” музыкаһына малайҙар һәм ҡыҙҙар башҡарыуында патриотик бейеү менән байрамды тамамлайбыҙ)**